Рәшит ШӘКҮР

# ”Елэм эле, елэм, алға уктамып...”



*Әҙәбиәткә мин иң элек шиғырҙар менән килеп керҙем. 1960 йылдар башында күтәрелеп сыккан быуын вәкилемен. Тормош һәм ижад юлдарыбыҙ еңел булманы. Төрлөбөҙ төрлөсәрәк үтте замандың һынауҙарын, капма-каршылыктарын. Әммә, шөкөр, ижад юлыбыҙға тоғро булып калдык. Әле хәҙер ҙә көсөбөҙҙө әҙәбиәткә, рухиәтебеҙгә арнап йәшәйбеҙ. Кайһы берҙәребеҙгә, әҙәби ижад менән бергә, ғилем донъяһында ла йөҙөп йөрөп эшләү бурысы төштө. Уны инде мин үҙем илгә хеҙмәт итеүҙең бер ынтылышы тип иҫәпләйем. Әммә шиғриәт барыбер күңел түрендә йәшәй. Етмештә лә ”бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә”, тип әйтергә хаклымындыр, тип уйлайым. Шул уй менән журнал укыусылары хөкөмөнә бер шәлкем шиғырҙарымды сығармаксы булдым.*

*Автор.*

## Урал батыр иле – сал Урал

Урал, Урал — хазиналар иле,
Мөғжизәләр иле, һай, Урал!
Тәңребеҙҙең һөйөп баккан ере,
Алтын-көмөш иле — дан Урал.

Урал, Урал — баһадирҙар иле,
Урал батыр иле — Уралтау;
Башкорт тигән баш халыкка иң тәү
Баш йорт булған изге Уралтау.

Урал, Урал — ак хыялдар иле,
Алсак нурҙар уйнап яткан ер;
Һомай коштоң канат аҫтарында
Иңләп-буйлап таңдар аткан ер.

Урал, Урал — таш каялар иле
Һәм калалар иле ул Урал;
Тулкын-тулкын булып
йәйрәп яткан
Сал далалар иле шул Урал.

Урал, Урал — илаһиәт иле,
Бөйөк заттар иле — Уралым;
Салауаттар, Вәлидиҙәр иле,
Азатлыктың Урал ораны.

Урал, Урал — оҙон көйҙәр иле,
Йырҙар сәңгелдәге Уралкай;
Күңелдәрҙе күккә олғаштырып,
Сыңрай-сыңрай һиндә курайкай.

Урал, Урал — тере һыуҙар иле,
Йәншишмәләр иле — киң Урал;
Буранбайҙың йырҙарылай иркен,
Рухыбыҙға беҙҙең тиң Урал.

Урал, Урал, боронғолок менән
Бөгөнгөлөк һиңә йәнәшә;
Аркайымың мең йыллыктар аша
Ғаләм менән, ана, серләшә.

Урал, Урал, Башкортостан һинең
Тере йәнең, тере йөрәгең;
Имен генә булһын тыуған еркәй,
Тыуыр таңдар, килер көндәрең!

*2001.*

# Асылыкай күле

Асылыҡай, дала һылыуҡайы,
Ярҙан-ярға тулҡын ҡағаһың;
Тулҡын ҡаға-ҡаға, ниҙәр көйләп,
Ниҙәр һөйләп, миңә бағаһың?!

Ниндәй хикмәт һинең
булмышыңда,
Ниндәй серҙәр һиндә һаҡлана?!
Ҡатлы-катлы тулҡын аҫтарында
Ниндәй илаһи көс сайҡала?!

Тылсым тулы күлем, һиндәме әллә
Күрше донъяларҙың ҡапҡаһы?
Килеп сығыр һымаҡ һылыу ҡыҙҙар,
Һыу төбөнөң асып ҡапҡасын.

Ҡырҡ һылыу ҡыҙ,
ҡыр(ы)к беренсеһе
Батша ҡыҙы үҙе — Һыуһылыу;
Мин, хыялбай, килдем әле бына,
Эй, Һыуһылыу, һине юҡһынып.

Һыу ҡыҙының сәс тараған ташы
Бар әле, бар күлдең ярында;
Ереҥ, һыуың һинең, тыуған яғым,
Мөғжизәле мәлен һағына.

Мөғжизәле мәлдәр күңелдәрҙә...
Мин һағынам шуны, һағынам,
Ысын менән хыял араһында
Шиғриәт бит ҡанат ҡағына.

Ете төн уртаһы. Күл өҫтөндә
Нурҙар уйнай, нурҙар — шәмәхә,
Күктәге ай яҡтырып уҡ китте,
Күл төптәре бына тамаша.

Күл төбөндә, имеш, беҙ белмәгән
Өр-яңы бер ханлыҡ-батшалыҡ;
Алтын ялатылған пайтәхете,
Урамдарҙа йөрөй шат халыҡ.

Һылыу ҡыҙҙар әйлән-бәйлән уйнай
Ҡала ситендәге майҙанда,
Ҡыҙҙар йыры моңло, талғын ғына
Ишетелә әллә ҡайҙарға.

Кемдер, ана, ҡыл-ҡумыҙын сиртә,
Йөрәк түрҙәренә үткәреп;
Ҡыл-ҡумыҙҙың сыңын һыбыҙғылар,
Думбыралар ала күтәреп.

Гөрләп торҙо уйын таңға ҡәҙәр
Һыуһылыуҙың тыуған илендә...
Имен-аман икән күрше донъя
Асылыҡай күлдең төбөндә.

Шуны күреп: «Собханалла!» —
тимен,
Әкиәткә ихлас таң ҡалам.
Асылыҡай күлдә аҡ тулҡындар
Аҡ балыҡтай уйнап сайҡала.

# Салауатым

Салауатым — быуаттарҙың изге аманаты,
Азатлыҡтың яҡты рухы, тере ялҡыны.
«Салауат!» тип бер һүҙ әйтеү менән, йөрәктәрҙә
Уттар яныпп, хистәр ташып китә алҡынып.

Салауатым — илем, тиеп, йәнен фиҙа ҡылған
Пәйғәмбәрҙәр заты, Урал батыр балаһы.
«Салауа-ат!» тип оран һалһа әгәр Башҡортостан,
Күтәрелер Урал тауы, башҡорт далаһы.

*2003.*

## *Кыҫкалыҡ*

Ҡыҫкалыҡта — оҫталыҡ, тип,
Тапҡыр әйткәндәр мәгәр.
Хуп күрерҙәр, телмәреңде
Ҡыҫка тоталһаң әгәр.

Ҡыҫкалыҡ та, оҫталыҡ та
Бик тиҙ килмәй шул беҙгә.
Ул бер хыял булып ҡала,
Йәшең етһә лә йөҙгә.

*1999.*

***

Еләм әле, еләм алһыҙ-ялһыҙ
Толпарҙар бәйгеһендә.
Туҡталыу юҡ бында, туҡталыу юҡ
Ҡышҡыһын, йәйгеһен дә.

Ниндәй шатлыҡ — офоҡтарҙан ары
Өр-яңынан офоҡ күренә.
Беҙ үрләргә тейеш ғүмер буйы
Шиғриәттең бейек үренә.

*1999.*

***

Илдәр гиҙәм, ерҙәр гиҙәм, күккә ашам,
Түбән төшәм, ҡаяларға менеп баҫам.
Оло маҡсат — мин эҙләйем үҙ-үҙемде.
Үҙ-үҙемде, үҙ йөҙөмдө, үҙ һүҙемде.

Был донъяла һәр әҙәмдең үҙ өлөшө,
Өлөшөнә төшһә әгәр — үҙ көмөшө.
Һәр бер кеше, эҙләп табып, тиреп алһын,
Бөртөгөн дә әрәм итмәй, үҙ емешен.

*2004.*



***

Дуҫлыҡ тигән мәңге ихлас уй-тойғолар
Һайыҡтымы, һайыҡҡандай һыуҙарыбыҙ?
Ҡайҙа, дуҫтар, саф мөхәббәт кеүек күреп,
Ихласлыҡты данлай торған йырҙарыбыҙ?

Дуҫлыҡ хәҙер әллә алыш-бирешме ул,
Баҙарҙарҙа һатыу иткән бер эшме ул?
Һин — миңә лә мин — һиңә, тип, күрәләтә
Бизмәнеңде тотоп тороу тейешме ул?

*2006.*

***

Эй донъяның фанилығы!..
Уйлаһаң, уйҙар етмәҫ,
Үткәндәрҙе, киләсәкте
Буйлаһаң, буйҙар етмәҫ.

Ә шулай ҙа ғүмерҙәр бит —
Илаһи бер моң ғына.
Таңға бағып, таң ҡаламын
Илаһилыҡ моңона.

*2004.*

***

Күрә тороп күпме иблислекте,
Белә тороп ҡара көстәрҙе,
Мин яҡтыға бары мөкиббәнмен,
Яратам мин яҡты хистәрҙе.

Табынам да торам аҡ төҫтәргә,
Табынамын бары аҡлыҡҡа.
Таң ҡаламын һәр саҡ инсафлыҡҡа,
Табынамын бары хаҡлыҡҡа.

*2005.*

## Бәйгеләргә сыҡтым

Ижад майҙанында ярыш бара,
Бер минутҡа булмай туҡталып.
Бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә,
Еләм, сабам, алға уҡталып.

Атым минең, толпар затым минең,
Ынтыл әле, ынтыл, йән дуҫым.
Беҙ етәһе үрҙәр алда әле,
Барҙыр унда, барҙыр ырыҫ, моң.

Аҡ көндәрҙә, ҡара төндәрҙә лә
Янып торһон өмөт йондоҙо.
Ҡанатланып ос һин, толпар атым,
Ара алыҫ, алда юл оҙон.

*1998.*

***

Сығайыҡсы әле сәхрәләргә,
Сәхрәләрҙә — киңлек, иркенлек.
Сәхрәләрҙә күк тә бейегерәк,
Сәхрәләр бит йәмле, һөйкөмлө.

Сығайыҡсы әле сәхрәләргә,
Дауа ғына унда һауалар.
Балаларын көткән әсә һымаҡ,
Ҡаршылай бит беҙҙе далалар.

*2004.*

***

Эй заманым, мин, ахыры, һинән
Бер аҙ алға уҙып киткәнмен.
Һин ябынған ҡара бөркәнсекте
Алданыраҡ тишеп үткәнмен.

Бөркәнсегең аша, эй замана,
Күр һин, ана, ҡояш йылмая.
Мин, ҡояштан нурҙар ала-ала,
Ҡояш булып бағам донъяға.

*2005.*

***

Ҡыш миҙгеле еткәс, тыуған ерем
Ап-аҡ ҡарҙар ята ябынып,
Әйтерһең дә, тик аҡлыҡҡа ғына,
Тик сафлыҡҡа ғына табынып.

Ап-аҡ ҡарҙар — ап-аҡ келәм
бит ул,
Ҡәҙерҙәрен белеп баҫығыҙ.
Аҡ келәмгә баҫып, аҡ донъяның
Аҡлыҡтарын ғына асығыҙ!

*2005.*

